Башҡортостан Республикаһы мәғариф министрлығы

Көйөргәҙе районы Аҡһары ауылы төп дөйөм белем биреү мәктәбе

**Ғәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтов. Тормошо һәм ижади эшмәкәрлеге.**

Башҡарҙы:Көйөргәҙе районы Аҡһары ауылы
төп дөйөм белем биреү мәктәбенең
9 класс уҡыусыһы
Ишмөхәмәтова Әдилә Айҙар ҡыҙы
Ғилми етәксе:башҡорт теле һәм әҙәбиәте
Уҡытыусыһы
Һөйөндөкова Рәмилә Зиннур ҡыҙы

Аҡһары-2020

**Йөкмәткеһе**

**Инеш**

Ғәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтов. Тормошо һәм ижади эшмәкәрлеге.......3

Фәнни-тикшеренеү эшенә дөйөм ҡылыҡһырлама........................................3.

**Төп өлөш**

**I бүлек.Тормошо һәм ижад юлы.................................................................4**

2) Йырсының бала сағы.........................................................................4

3)Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың ғаиләһе..........................................................5

**II бүлек.Композиторҙың ижадының-төп башланғысы..............................6**

2)Скрипкасы Исмәғил Һилалов иҫтәлектәре.......................................6

3)"Сания" операһы яҙылыу тарихы......................................................7

4) "Эшсе" операһы яҙылыу тарихы.......................................................9

**III бүлек. Ғәзиз Әлмөхәмәтов-күп яҡлы талант эйәһе..............................10**

2) Йәш таланттар эҙләүе.........................................................................10

3) Тәрбиә буйынса башҡарған эштәре.................................................11

4) Йырсыны ҡулға алыуҙары.................................................................12

**IV бүлек .Йомғаҡлау.................................................................................12**

Ҡулланылған әҙәбиәт...........................................................................14

## Инеш

## Ғәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтов. Тормошо һәм ижади эшмәкәрлеге.

Яҡташыбыҙ- Ғәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтов күренекле композитор, йырсы, йәмәғәт эшмәкәре, халҡыбыҙҙың лайыҡлы уланы.Башҡорт, татар профессиональ музыкаһына нигеҙ һалыусы шәхесебеҙ.

Башҡорт халыҡ йырҙарын йыйып, өйрәнеп, халыҡҡа еткереүсе лә ул.

Шатлыҡлыһы ла, ҡайғылыһы ла, дан йыры ла, ҡәһәр йыры ла бар халҡыбыҙҙың.

Башҡорт халҡының рухи мәҙәниәтен дә төп урынды йыр биләй. Халыҡтың милли характерын, уның ифрат бай эске донъяһын, ата-бабаларыбыҙҙың тарихи хәтерен, фәлсәфәүи ҡараштарын сағылдырған йырҙар-баһаларын бер ни менән дә билдәләп булмаған ҡиммәтле мираҫ.Шуны яҡташыбыҙ нескә күңеле менән тойған һәм аңлаған.

Башҡорт халыҡ йырҙарының теле лә, һүҙҙәре лә ифрат үҙенсәлекле. Уның хис-тойғо биҙәген һәм фекер тәрәнлеген биреү өсөн , шул мөхиттә тыуып-үҫеп, тәрбиәләнергә кәрәктер.

Ошо моңдоң мөхитендә тыуып-үҫкән, оло шәхесебеҙҙең береһе, ғорурлығыбыҙ - Ғәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтов.

Бөгөнгө эҙләнеү эшемдә лә, уның әле өйрәнелеп бөтмәгән тормошо һәм ижады тураһында мәғлүмәт туплау һәм белергә тырышыу тора.

### Фәнни-тикшеренеү эшенә дөйөм ҡылыҡһырлама.

**<u>Эштең тикшереү обьекты</u>.**

Йырсы, композитор,йәмәғәт эшмәкәре Ғәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтовтың тормошо һәм ижади эшмәкәрлеге, уның иҫтәлеген мәңгеләштереү өҫтөндә башҡарылған эштәр.

**<u>Тикшереү предметы.</u>**

Ғәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтовтың ижадының үҙенсәлеген тикшереү, иҫбатлау, яңы мәғлүмәттәр туплау.

**<u>Фәнни-тикшеренеү эшенең актуаллеге.</u>**

Композитор ижадының халыҡсанлығы, бай, матур, һутлы булмышы. Ошо һәләтен музыкаль әҫәрҙәре аша, туған халҡына еткереүе.

Уның ижад шишмәһенең сығанағы ҡайҙан башланған? Йырға тиң - үтелгән ғүмер юлы.

**<u>Фәнни-тикшеренеү эшенең маҡсаты;</u>**

-Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың тормош һәм ижад юлын тәрәнерәк өйрәнеү;

һәм күберәк мәғлүмәт туплау.

-Композиторҙың үҙенсәлекле музыкаль әҫәрҙәренең башҡорт профессиональ музыкаһы үҫешендәге әһәмиәтен, ролен билдәләү.

- Ғәзиз Әлмөхәмәтов ижадының, төп идея-тематикаһы-ул халыҡ яҙмышы.

Халҡының киләсәген уйлау ; тыуған ерен яратыу, хөрмәт итеү.

-Уның музыкаль әҫәрҙәрендә, халыҡ ижады өлгөләренең сағылышын, ҡулланылышын тикшереү.

**Төп өлөш**

**I бүлек.Тормошо һәм ижад юлы.**

**2) Йырсының бала сағы**

Йырсы, композитор, йәмәғәт эшмәкәре Ғәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтов, элекке Ырымбур өйәҙе, хәҙерге (Көйөргәҙе районы) Иҫке Мораптал ауылында 1895 йылдың 29 октябренда донъяға килә.Ғаилә лә егерме бала тыуып, шуның алтауһы иҫән була. Уларҙың ғаиләһе бик ярлы була. Атаһы көнө-төнө, улдары менән байҙарға бил бөгә. Берҙән-бер көндө, Ғәзиз дә ағаһы менән яҡшы тормош артынан Ташкент яҡтарына юл ала.

Йылы яҡтағы тормош, бик еңелдәрҙән булмай. Тамаҡ туйҙырыр өсөн, көн-төн эшләргә кәрәк. Йәйен виноград баҡсаларында эшләп, ҡышын мәҙрәсәлә уҡыған. Ә инде иң үҙәктәргә үткәне, тыуған яҡтарын һағыныу булғандыр. Күңелендәге болоҡһоуҙы, юҡһыныуҙы ул йыр менән баҫа.

Аҡҡош кеүек үҫер инем

Тыуған үҫкән илемдә.

Баулы ыласын кеүек талпынамын

Тыуып үҫкән ергә ҡайтырға.

Йорт-илем иҫкә төшкән саҡта

Әсәнән яңы тыуғандай булам.

Йорт-илдәрем иҫемә төшкәндә,

Бер ултырам да шул бер торам.

Мин һандуғас инем үҙ илемдә,

Һарғаямын кеше ерендә.

Иҫән генә булһаҡ, беҙ ҡайтырбыҙ,

Ҡояш ҡына кеүек әйләнеп.

Тыуған илкәемә ҡайтыр инем.

Аяҡтарым талһа ла, имгәкләп.

Уның өсөн йыр, баласаҡтан уҡ күңел күрке булып әүерелгән була. Ул үҙенең шатлығын да, һағышын да йырға һалған, йыр менән күңелендәген әйтеп биргән.

Ғәзиз Сәлих улы, баласаҡтан уҡ бик күп йырҙар белгән булған. Күңелдәргә үтерлек итеп моңло йырлауы , ерле халыҡта һоҡланыу уята.

Оҙаҡламай уны концерттарға, сығыш яһарға саҡыра башлайҙар. Ә бер-нисә йылдан, уның даны Урта Азиянан тыш, алыҫ Себер, Башҡортостан һәм Татарстанға тарала.

Ә артабан инде гастролдәр башлана; Себер, Ҡаҙаҡстан, Әзербайжан тарафтарына табан.

**3)Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың ғаиләһе.**

Йәшел генә булыр йәй ташы,

Ҡыҙыл ғына булыр ҡыр ташы.

Үткән генә иҫкә төшһә,

Эркелеп-эркелеп китә күҙ йәше.

Алдарым да һин инде,

Гөлдәрем дә һин инде.

Уттарын да һин ҡабыҙҙың,

Һыуҙарын да һип инде.

1923 йылда, 25 йәшлек Мәстүрә Ғилман ҡыҙы Фәйзуллина менән сәстәрен-сәскә бәйләйҙәр, никахлашалар.1924 йылдың 24 мартында, мөхәббәт емештәре, ҡыҙҙары Роза донъяға ауаз һала.

Ата менән әсә бик шатланып ҡабул итәләр, ҡыҙҙарының тыуыуын.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, Розанан һуң донъяға килгән ике ҡыҙҙары, сабый саҡта тиф ауырыуынан үләләр. Ата менән әсә бик ауыр кисерә, был ҡайғыны. Ғәзиз Сәлих улы, үҙе лә ике тапҡыр тиф менән ауырып саҡ үлемдән ҡала.

Ошо оло һынауҙарҙы, ҡайғыларҙы ул, мотлаҡ йыр менән еңгәндер.

**II бүлек.Композиторҙың ижадының-төп башланғысы.**

Һәр шәхестең үҙенә талабы, нимәлер барлыҡка килтереү өсөн шул ижад емеше өҫтөндә эшләүе, һәм уның башланғысы була.

Талантлы шәхес, концерттағы сығыштар менән генә ҡәнәғәтләнмәй. Ул көньяҡ халыҡтарының фольклоры, башҡорт һәм татар халыҡ йырҙары, уларҙың тарихы һәм легендалары менән ҡыҙыҡһына башлай.

Йырҙар өйрәнә, легендаларын өйрәнә, легендаларын яҙып ала. Бер ни тиклем ваҡыттан йырсы-фольклорист булып китә. Был эштәр генә, ҡәнәғәтлек килтермәй.

Эҙләнеү эшемде алып барғанда, уның эргә-тирәһендәгеләрҙең бик күп кенә иҫтәлектәренә юлыҡтым. Бына нимәләр яҙалар, уның тураһында.

**2)Скрипкасы Исмәғил Һилалов иҫтәлектәре.**

...Мине һәр ваҡыт аптырата ине, моңло йырлап дан ҡаҙанған артист, йырсыға, ҡайҙан килде икән ул уй. Милли опера театры булдырыуға, республикала опера театры астырыу тураһында, ныҡлап уйлана.

Уның иҫтәлектәренә күҙ һалған да, бик күп нәмәләргә асыҡлыҡ килә. Улар бик күп кенә йылдар, сәнғәттә бергә байтаҡ эштәр башҡарғандар. Исмәғил Иләлов, Ғәзиз Әлмөхәмәтов концерттарында ойоштороусы, концерт администраторы булып эшләгән, музыка ҡоралдарында уйнаған булған. Аҙаҡ инде, Мәскәү консерваторияһында, башҡорт бүлеген асыуҙы ойоштороуҙа актив ҡатнаша. Үҙенең иҫтәлектәре менән уртаҡлаша.

“Ҡыҙыл Армияла хеҙмәтемде тултырғас, Ташкент ҡалаһына килеп, консерваторияға скрипка класына уҡырға керҙем.Был, 1921 йылдар ине,-тип яҙа. Ауыр ваҡыттар булһа ла, урындағы мәҙәниәт көндән-көн сәскә ата ине.

Бына бер көндө, Сәмәрҡәндтәге гастрольдарынан һуң, Ғәзиз Әлмөхәмәтов ҡайтып төштө.Беренсе осрашыуҙа уҡ, үҙенең хыялы менән уртаҡлашты, опера театры асыу тураһында.Уның хыялының инеш башы, 1920 йылдың ҡышына барып тоташа.Бакуҙағы сығыштарынан һуң, уны Әзербайжан музыка театрына, бер спектакльга роль биреп саҡыралар. Шул хәлдән һуң, уның күңелендә милли операға нигеҙ һалыу хыялы бөрөләнә.Ниндәй спектакль булаһың ул? У.Гаджибековтың музыкаль комедияһы “Аршин мал алан” тип аталған була.Сәхнәлә был музыкаль комедияны, ҙур алҡыштар менән ҡабул итә халыҡ. Бик оҫта итеп яҙылған, лирик дәртле, күңелле музыка менән биҙәлгән, әҫәр була ул.

Ошо ваҡиғанан һуң, ул башҡорт һәм татар музыкаһын нигеҙ итеп опера яҙыу менән хыяллана.

**3)”Сания” операһы яҙылыу тарихы.**

Ғәзиз Әлмөхәмәтов был хыялын тормошҡа ашыра, либретто яҙа һәм музыка һайлай. “Сания” операһының эскиздары шулай барлыҡҡа килә лә инде. Шул уҡ йылды, Ҡазанға барып, талантлы музыканттар Солтан Ғәбәши һәм Василий Виноградов менән “Сания” операһы өҫтөндә эшләйҙә. Был осор өсөн был бик ҡыйыу аҙым була.Сөнки был ваҡытта хатта Өфөлә лә, Ҡазанда ла опера театрҙары булмаған әле.

1925 йылда, Ҡазанда “Сания” операһының премьераһы булып уҙа.

Операның төп геройҙары ябай крәҫтиән ғаиләһенән булған Сания һәм Зыя.Уларҙың мөхәббәттәренең эскерһеҙлеге, ябайлығы.Күтәрелгән проблемаларҙың береһе , ике йәш йөрәктәрҙең үҙ-ара синфи тигеҙһеҙлеге. Композитор бик оҫта итеп башҡара, үҙ эшен.Башлаған эште алып барып сығарыу өсөн , әлбиттә алда әйтелгәнсә Солтан Ғәбәши менән Василий Виноградовтар менән берҙәм эшләйҙәр.Был оло эшкә тотоноу алдынан икеләнеүҙәр ҙә була, әлбиттә.

Был ваҡытта Солтан Ғәбәши Ҡазандың музыка техникумында уҡытыусы булып эшләй. Ошонда уҡ,урыҫ композиторы, скрипкасы Василий Виноградов та эшләгән була.

Тәүге мәлдә Ғәбәши, был оло эшкә тотонорға икеләнеп ҡала.Уға нисектер,иң тәүҙә үҙенсәлекле партиялы композиция тыуҙырып, оркестр партитураһын эшләргә тигән уй килә, шуға ла икеләнә.Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың 1923 йылда, Ҡазанға икенсе килеүенә, ул бергә эшләү тураһында ныҡлы ҡарарға килә. Ун бишләгән халыҡ көйөн, операның нигеҙе итеп алырға хәл итеlә. Шулай эште башлайҙар.

Авторҙар, фольклорға автор музыкалары үрелеп барыу менән барлыҡҡа килтерергә хәл итәләр. Был этапты башҡарып сығарыуҙа яҙыусы Фәтих Әмирхандың роле бик ҙур була.Уның квартираһында йыйылып, опера тураһында әңгәмәләр, музыкаль, вокаль эпизодтар тыңлайҙар, либреттоның тексына төҙәтмәләр индерәләр.

Операның тәүге өлөшө, концерттарҙа халыҡ хөкөмөнә сығарыла. Халыҡ бик йылы ҡабул итә.

1925 йылдың башында, Татарстан АССР-ы композиторҙарҙың эштәрен тиҙерәк тамамлауҙарын һорайҙар. Сөнки Республиканың биш йыллығы етеп килгән була.

Ниһәйәт , опера өҫтөндә апрель-май айҙарында эш тамамланыу яғына табан бара.Бейеүҙәрҙе балетмейстр Юлия Муко ҡуя, музыкаль етәксеһе Александр Литвинов оркестр менән репетициялар үткәрәләр.

Был операны барлыҡҡа килтереүҙә шулай уҡ, Ҡазан музыка техникумының да роле ҙур; хор, оркестр һәм ҡайһы бер йырсы – солистар барыһы ла ошо уҡыу йортонан булалар. Симфоник оркестрҙың дирижеры, ошо уҡ уҡыу йортонда эшләүсе Александр Литвинов. Хорҙа йырлаусы, студенттар: Гөлсөм Сөләймәнова, Ғәйшә Камаева , Суфия Әхмәҙуллина.

“Сания” операһында йырлаусы солисткалар араһында шулай уҡ, ошо уҡыу йорто студенттары була. Мәҫәлән, Разыя Садыҡова (композитор Сара Садыҡованың һеңлеһе) , Зөһрә Байрамова, Шәмсинур Вәлиева.

Йырла ғына йырла тейешһәгеҙ,

Йырлаусы ла кеше мин түгел.

Моңланып та, бер йыр йырламаһам,

Оҫта кешеләрҙән һис кәм түгел.

Туп-туп ҡына баҫҡан тура атымды

Йөҙ илле һум биреп һорайҙар.

Һәр ҡайҙа ла барһаң, бик матур бул,

Кем балаһы, тиеп һорайҙар.

Төп ролде, баштан уҡ Мәскәү консерваторияһы студенткаһы (һуңынан күренекле композитор) Сара Садыҡоваға бирергә уйлайҙар. Билдәләп үткәнсә, бөтөн арияларҙа "Сания"-ның Сара Садыҡованың вокаль мөмкинлектәренә ҡарап яҙа, Солтан Ғәбәши.

Тик, ғаилә хәле сәбәптәренән, Сара Садыҡова был премьерала сығыш яһай алмай. Уның урынына, һеңлеһе Разыя сығыш яһай.

"Сания"-ның премьераһы 1925 йылдың 25 июнендә, опера театрында (хәҙерге К.Тинчурин театры) бинаһында аншлаг менән үтә.

Сит илдәрҙән бик күп, ҡунаҡтар була.Сөнки опера Татарстан Республикаһының , беренсе юбилейында ҡуйыла.

"Сания" операһын халыҡ бик йылы ҡабул итә, шул уҡ ваҡытта, байтаҡ ҡына кире фекерҙәр ҙә була.

Республика етәкселеге, авторҙарҙы ҙур ғына күләмдәге гонорарҙар менән бүләкләйҙәр.Был опера беренсе башҡорт-татар операһы булып иҫәпләнә.Был ваҡиғанан тиклем, бер-нисә йыл үткәс яҡташыбыҙға "Башҡортостан АССР-ның халыҡ артисы"(1929) тигән исем бирелә.

**4) "Эшсе" операһы яҙылыу тарихы.**

Бынан һуң "Эшсе" операһы тыуа. Опера Мәжит Ғафуриҙың эшселәр темаһына яҙылған "Эшсе" поэмаһы нигеҙендә эшләнә. 1930 йылда Мәскәүҙә, Бөтә Союз театрҙар олимпиадаһында премьераһы була.

Төп герой Ниғмәт-ярлы егет. Яҡшы тормош эҙләп, сит-яҡтарға сығып китеп, алтын приискыһында эшләй башлай. Күпме генә эшләмәһен, барыбер ярлы булып ҡала. Поэмала Ниғмәт кире ауылына ҡайтып китһә; ә опера либреттоһында, ул-халҡының ирке өсөн, батырҙарса һәләк була. Был ваҡиғалар 1905 йылдар тирәһендә була.

Беренсе опера "Сания" халыҡ көйҙәренә нигеҙләнгән булһа, ә "Эшсе" операһына байтаҡ үҙгәрештәр керетелә. Сөнки, бында кешенең хис-тойғоларын, күтәрелгән проблемаларҙы асыу өсөн, халыҡ көйҙәре менән асып һалыу мөмкин түгеллеген аңлайҙар.

Музыка белгесе, Йолдоз Исәнбет яҙыуынса: “Эшсе” операһында, мөхәббәт темаһына кәрәкле, ниндәйҙер күңелле көйҙәр түгел, ә яңы тема күтәрелә. Опера ла ғына түгел, ә хатта драмала асып һалыуы ауыр булған, тема күтәрелә.

Эшселәрҙең йәшәү, эшләү рәүешен күреп танышыу өсөн Ғ.Әлмөхәмәтов, С.Ғәбәши, М.Ғафуриҙар ҡалаһына юлланалар. Был операны башҡарып сығарыу өсөн, ныҡ ярҙам итә.

Ғәзиз Әлмөхәмәтов, ошонда үҙенең геройы Ниғмәттең прототибын таба.

Ғәзиз Әлмөхәмәтов-төп герой Ниғмәтте башҡара. Ул тулыһынса был образды асып, халыҡҡа еткерә.

**III бүлек. Ғәзиз Әлмөхәмәтов-күп яҡлы талант эйәһе.**

Ай-һай ҙа ғына тимәй, көйҙәр килмәй,

Нужа күрмәй егет ир булмай.

Нужа ла ғына күреп, ирҙәр булһа,

Ҡайҙа ла ғына йөрөһә, хур булмай.

Менгән генә аты, эй, ел кеүек,

Үрәскәйҙәре киң кеүек.

Күп илдәрҙе йөрөп үтә килдем,

Ҡайҙа үҙебеҙҙең ил кеүек.

1931 йылда, Башҡортостанға күсеп ҡайта, (ҡайтыу йылының тағын ике варианты бар) Башҡорт сәнғәт техникумында эш башлай, концерттар менән сығыш яһай, музыка яҙа. Ул ең һыҙғанып, илһамланып эшләй.

Мәскәү консерваторияһы эргәһендә башҡорт студияһы астырыуҙы юллай башлай.

**2) Йәш таланттар эҙләү эшмәкәрлеге.**

Ул һәләтле балалар эҙләп райондарға сыға.Фольклор йыйыу буйынса ойошторған экспедицияларында бер юлы һәләттәрҙә эҙләй. Баныу Вәлиева, Хәбир Ғәлимов, Ғабдрахман Хәбибуллин, Заһир Исмәғилев, Хөсәйен Әхмәтов, Зәйтүнә Илбаева, Ульяна Калинина-Сыртланова, Әсмә Шаймоaccess, Мәрйәм Ғабдрахманова, Мөслимә Мусина, Сәлих

Хөснийәров, Мәғәфүр Хисмәтуллин, Рәүеф Мортазиндар-барыһы ла ул тапҡан таланттар.

Ғәзиз Әлмөхәмәтов халыҡ йырҙары, классик романстар, ариялар башҡарыу менән бергә үҙе көйҙәр яҙа, ижад менән шөғәлләнә. “Маяковскийҙың үлеменә ҡарата” тигән үҙенсәлекле музыкаль әҫәр яҙа. “Шомло ел”, “Сайҡалалар кәмәләр”, “Йырҙар яҙам”, “Ағиҙел буйҙарында”, “Көтөүсе” тигән бик тә үҙенсәлекле йырҙары билдәле. Улар музыка донъяһының алтын фонды тип, икеләнмәенсә әйтергә була.

**3) Тәрбиә буйынса башҡарған эштәре.**

1933 йылда халыҡты музыкаль яҡтан тәрбиәләү проблемаһы буйынса китап нәшер итә. “Башҡорт совет музыкаһын тыуҙырыу өсөн көрәш юлында” тигән брошюраһы бик тиҙ танылыу ала. Башҡорт телендә яҙылған бик төплө хеҙмәт була ул.

Йырсы халыҡты музыкаль яҡтан тәрбиәләү, уларға зауыҡлы әҫәрҙәр тыңлатыу хыялы менән йәшәй.

1936 йылда, йөк машинаһын сәхнә итеп йыһазлап, фортепиано ултыртып, ике ай буйы республика ауылдарында концерт менән йөрөйҙәр. Халыҡ өсөн күрелмәгән был музыка ҡоралында уйнаусы пианистка Вера Иваневская, ғәжәйеп оҫта мандолинасы татар егете Исмәғил Һилалов, бейеүсе Заһиҙә Бәхтийәрова, йырсы Диана Нурмөхәмәтова һәм администратор Шәүкәт Мәсәғүтов була был концерт бригадаһында.

Пластинкалары һәм телдән-телгә күскән даны аша халыҡ Ғәзиз Әлмөхәмәтовты яҡшы белә. Шуға ла концерттарҙа халыҡ иҫ китмәле күп була. Ҙур ауылдарҙа сығыш яһаған саҡта тирә-яҡтарҙан да йыйылышып киләләр.

Ғәзиз Әлмөхәмәтов туған халҡының йырҙарын бик яратып һәм ҙур ихласлыҡ менән башҡара. “Урал”, “Буранбай”, “Сибай”, “Таштуғай”, “Зөлхизә”, “Шәүрәкәй” йырҙары репертуарынан төшмәй.

Киң диапазонлы, иҫ китмәле моңло тенор менән башҡара ул халыҡ йырҙарын.Үҙе ижад иткән йырҙар ҙа халыҡ һымаҡ уҡ тиҙ арала отоп алына, күңелгә ятышлы була.

Ул киләсәк өсөн йәшәй:опера театры репертуарын әҙерләргә тотона, Солтан Ғәбәшигә, Александр Ключаревҡа яңы операларға заказ бирә,

итальян операларын тәржемә итә, үҙе “Ынйыҡай менән Юлдыҡай” тигән опера яҙа башлай.

Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың иң ҙур хыялы-опера театры асыу була

**4) Йырсыны ҡулға алыуҙары**

Әммә театр асылыр алдынан ғына Ғәзиз Әлмөхәмәтовты, халыҡ йырсыһын, “халыҡ дошманы” –тип 1937 йылдың 12 декабрендә ҡулға алалар.

Ҡыҙының хәтерләүҙәренән:”Атайымды, төндә килеп алдылар, мине алтынсы класта уҡый инем.Иртән атайым, Ташкентка гастрольгә китергә тейеш ине, сумаҙандар тултырылғайны. Ҡулға алырға килеүселәр, билдәле артистың ябай ғына йәшәүенә, байлығы булмауына аптыранылар. Бер-нисә көндән, халыҡ дошманының ҡатыны тип, әсәйемде лә ҡулға алдылар. Бер аҙ ваҡыттан, әсәйем ҡаты ауырығас кире ҡайтарҙылар.”

Ә Ғәзиз Әлмөхәмәтовты ете ай төрмәлә тоталар. Уға тағылан ғәйеп, “халыҡта йыр аша;милләтселек тәрбиәләү”. Ул төрмә лә, ваҡытта ла йырға хыянат итмәй.Эргәһендәгеләргә “Урал” менән “Буранбай”ҙы йырлай.

1938 йылдың 10 июлендә аталар.Уның менән бер көндө, НКВД- органы Риза Әбүбәкиров,Әхмәт Иҫәнсурин (Обком ВКП-кешеләре), Булат Ишемгулов, Ғөбәйҙулла Дәүләтшин-яҙыусылар, М.Мәһәҙиев-Баш.драм.театрҙың худ.етәксеһе, Вәлиулла Мортазин-актер, Дауыт Юлтый-яҙыусылар союзы секретары һ.б. Барлығы 33 кеше. Башҡорт халҡының аҫыл улдарын, юҡ итәләр. Улар киләсәгебеҙ өсөн, ниндәй ҙур эштәр башҡарырҙар ине...

**IV бүлек .Йомғаҡлау**

Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың барлыҡ башҡарған эштәрен юҡҡа сығарырға тырышалар.Ҡыҙы Роза Латыпова ла, Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың, үҙ тауышы менән бер генә пластинка һаҡланған.

“Эшсе” операһынан Ниғмәт арияһы, ә икенсе яғында “Миңлебикә”йыры. Был пластинканы, ике туған ағаһы, Ташкент баҙарында һатып ала. Шуныһы ҡыҙғаныс, пластинка ла йырсының исем, фамилияһын махсус рәүештә юйғандар.”Халыҡ дошманынан” ҡурҡҡандар. Мәҙәни үҙәктәрҙә эленеп торған, сәхнә әһелдәренең күмәк фотографияларында ла уны буяп ҡуялар.

Алтынға күпме, бысраҡ буяһаң да; үҙ ҡиммәтен юғалтмаған кеүек үк, яҡташыбыҙҙың ғәйепһеҙлеге иҫбатлана ла бит. Тик кешене кире ҡайтарып булмай шул...

Ғәзиз Әлмөхәмәтов башҡорт  халҡының, һис шикһеҙ, талантлы улы. Бөгөнгө көнгә тиклем яратылып башҡарылған  “Сайҡалалар кәмәләр” йыры, оперлары буйынса ғына ла уның ни тиклем сағыу композитор булғанлығын күҙалларға  мөмкин.

Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың  тыуына  100 йыл тулыу уңайы менән Мораптал ауылында  музей асыла, Иҫке Мораптал ауылында бер урамға исеме бирелә,Ә Республика музыка-тәрбиә мәктәп-гимназияһына уның исеме бирелә. Халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың  Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге республика конкурстары үткәрелә һәм лауреаттар билдәләнелә.

Ә белем усаҡтарында,уның тормошон, ижад юлын яҡтыртҡан  инша конкурстары, фәнни-ғәмәли конференциялар үткәрелеп киләсәк быуында милли  зауыҡ тәрбиәләнә.

Халыҡ хәтере мәңгелек....

Халҡы күңеленән йолҡоп алырға тырышһалар ҙа, башҡорт  халҡының күренекле улы, үҙ халҡына ҡайтты, мәңгелеккә...

Тынма йөрәк, ян күберәк.

Тынмаһындар- йырҙарымда...

Тере тамсы, булып улар

Ҡалһын  кеше уйҙарында.

**Ҡулланылған әҙәбиәт**


1.Баһауетдинова М.И.,Йәғәфәрова Г.Н. "Уҡыусыларҙың фәнни-тикшеренеү эшен ойоштороу: Методик ҡулланма.-Өфө: Китап, 2012."

2.Мавлетов В.С."История и культура Башкортостана.Хрестоматия.Уфа, ГУП "Уфимский полиграфкомбинат",2003.

3.Галлямова Ляля "Краски родного края" (очерки),-Өфө:Китап, 2002.

4.Сурко Е. "Композиторы и музыковеды Башкортостана" (Сборник включает в себя статьи о музыковедах и композиторах Республики Башкортостан)-Өфө: Китап, 2002.

5.Бураҡаев И.Д.,Бураҡаева М.С.,Юлмөхәмәтов М.Б. "Башҡорт мәҙәниәте"(Тормош һабаҡтары) :8 класс өсөн дәреслек.-Өфө:Китап, 2004.

6.Шәкүр Р. "Ғәзиз Әлмөхәмәтов"//Арҙаҡлы башҡорттар-Өфө:Китап, 2005.

7.Тукаев Р. "Альмухаметовы"//Ватандаш.-1999.-№1-с.196.

8.Юлан Азат.Ғәзиз Әлмөхәмәтов-йырсы һәм яугир //Йәшлек.2005.29окт.

9.Р.Ә.Истәкова "Башҡорт халыҡ йырҙарының биҙәктәре"// Башҡортостан уҡытыусыһы-2010.-№6

10.Р.З.Нәжметдинова "Музейҙар-илһам сығанағы"// Башҡортостан уҡытыусыһы-2016.-№10

11Давыдова Э. "Служитель музыки"//Ватандаш.-2005.-№11

12.Сайфуллин С. "Оборванная мелодия: Г.С.Альмухаметов. // Трудный путь к правде/Сост.Г.Д.Иргалин, Н.П.Каменев-Уфа:Китап, 1997. "

13.Газиз Альмухаметов и Султан Габяши в Казани: Материалы и документы.-Уфа: Китап, 1995.

14. Газиз Альмухаметов: Статьи.Воспоминания. Документы /Авт.-сост. М.А.Идрисова-Уфа:Китап,2008.



“Сания” операһында ҡатнашыусыларҙың бер төркөм артистары.



.




В Мурапталово
Газиз, Галирахман и его
сын Альмухаметовы с
супругами, Галима
Альмухаметова
1933 год, Стерлитамак